**ҠУРАЙҘЫ БИРГӘН ХОҘАЙ , ДАНЛА БАШҠОРТ ТУҠТАМАЙ!**

**МӨНӘЖӘТ**

Үлән булып үçкән ҡурай урманымда,
Һеңдергән ҡоштар һайрауын алһыу таңда.
Елдәр иçкән. Кипкән ҡурай, моң ағылған,
Ишеткәндер ата баба шул сағында.

Ҡолаҡ һалып тыңлағандыр был ауазды,
Тәбиғәттең мөғжизәһен өҙөп алды.
Йөрәктәге моң һағышты башҡорт һалды,
Ел өргәндәй, һулыш өрҙө көйөн тапты.

Ошо ҡурай моңдарына, йыр яҙылды,
Башҡорт йыры оҙон көйлө булып ҡалды.
Һүҙен яҙҙы халҡым үҙе, йөрәгенән,
Тарих яҙып алып була һүҙҙәренән.

Күңелдәрҙе дәртләндерә ҡурайында,
Бейер башҡорт ҡанатланып шул сағында.
Илата ла, йыуата ла, ҡайғы килһә,
Яу сапҡанда ҡурай моңо Еңеү бирә.

Еребеҙҙә үçә ҡурай. Хоҙай бирҙе,
Иман ҡайтты, башҡортобыҙ Алла тине.
Онотҡайныҡ Йомабайҙы, Сәйфулланы.
Ҡурай данлар, уйнаусының көйө ҡалды.

Ҡурайсылар илде данлай, милләтемде,
Байраҡҡа ла ҡурай тажы төшөрөлде.
Быуындарға тапшырылһын ҡурай Ерҙә,
Матур булып үçһен йәштәр илебеҙҙә.

Хәйбуллалар ҡурай уйнай көйөн һайлай,
Иманда торайыҡ тейеп ерен данлай
Илһам бирһен, тик Хоҙайым был алышта,
Еңеп сыҡһын дала көйө был ярышта.

Ҡурай уйнай уландарың, тыңла халыҡ,
Иман Һүҙе Хоҙайыңда ғына хаҡлыҡ.
Кил Аллаңа, иман менән генә йәшә,
Тереклек тә данлай Уны, йәнәшәңдә.

Тирә яҡты байҡа бөгөн тамашасы,
Ҡоштар һайрай баш осонда Көн яҡтыны
Көндөҙ Ҡояш, төндә йондоҙҙар яҡтырта
Һин дә кеше яҡтылыҡ бул был доньяла.

Яҡтылыҡты иманыңда табырһың һин.
Йырым аша Хоҙайымды данлармын мин,
Ҡурайҙы ла Аллам биргән елен өргән.
Башҡорт уҙаманы килеп шуны өҙгән.

Өҙөп алған, көйөн һалған ҡурайында.
Башҡорт телендә йырлаған алһыу таңда.
Мираç булһын быуындарға өйрәтәйек.
Һәр өйҙә лә ҡурай моңо тергеҙәйек.